


Башкорт телендә махсус бит №3 (117)
Март, 2020 йыл

ижад

## Ҡыуанам мин яҙмышыма

*Ғәжәпләнмәйем сәстәремдең
көмөшөнә,
Еттем инде ғүмеремдең
етмешенә,
Уфтанмайым ғүмеремдең
уҙыуына,
Ҡыуанам мин яҙмышымдың
биргән өлөшөнә.
Шөкөр итәм хоҙайымдың
биргәненә,
Хафаланам был заманда
Ғәҙелһеҙлек, йәбер-золом
булмышына.
Сабыр итәм, кайҙа барайым,
нәмә эшләйем,
Һеҙҙән башка кемгә
өндәшәйем,
Ҡайғыһын да, шатлығын да
уртаклашып
Һеҙҙең менән бергә йәшәйем.*

## Бала сағым...

*Бала сакты һис онотоп булмай,
Беҙ бит һуғыш соро балалары,
Иҫән калғанбыҙ бит аслык
тырнағынан,
Унған, тырыш булғас әсәләр.
Беҙ, сабыйҙар, ултырабыҙ
һыйынышып
Кышкы һалкын караңғы бер
кистә,
Карын ас булһа ла, күңелдә
йыуатып,
Ярай әле ялкын бик йылы
мейестә.
Иҫтән сыкмай ул вакыттар:
Әнкәй, меҫкен,
өтөләнә беҙҙең өсөн,
Беҙгә ем кәрәгән белеп
өҙөләнгәндер инде,
Мөлдөрәп сыккан беҙҙең күҙ
йәштәрен күреп.
Иҫтә: шул вакытта әнкәй бирҙе
мейестән
Алып, көлөн өрөп, нәмәнелер
беҙгә бүлеп.
Әҙерәк әрем тәме килгән,
көйгән әсе күмәс,
Ифрат тәмле ине –
ул да бик аҙ,
Бары бер һынығы тейҙе.
Ул заманда оло бәхет
булыр ине
Бер туйғансы ашау
арыш икмәк,
Барыһы ла аңлаһындар ине
әҙәм балалары:
Икмәктең йәшәү
көдрәте икәнен.*

**Рәсиль КАМАЛОВ,**
**Яраткол ауылы.**

Был шиғарҙарҙы Яраткол ауылында йәшәүсе Шаһиҙулла Камаловтың абыйы яҙған. Улар өс малай (береһенә 10 йәш, 2-сеһенә – 4, 3-һенә – 2 йәш) һуғыш вакытында әсәләре менән йәшәгәндәр. Аталары Камал улы Кашфулла Камалов һуғыш юлдарында йөрөгән (ғинуар 1942–июнь 1945). Кашфулланың энеһе Шайдулла 1946 йылда Латвияла һәләк була. Нәк шул сакта хәбәре килеүгә, уның 4-се улы тыуа һәм уға Шайдулла тип исем кушкандар. Кашфулла һуғыш яраларынан 1947 йылда (50 йәшендә) ғаиләнән калдырып китә. Малайҙар атайһыҙ калалар.

**Нәжиә КАМАЛОВА.**

# Атайымды һағынам




***Бөйөк Ватан һуғышы бөтөүенә быйыл 75 йыл була. Ә беҙ һаман да яуҙа ятып калған атайҙарҙы һағынабыҙ.***

Минең атайым Хисмәт улы Хамидулла Хисматуллин "Юлдаш" колхозында тракторсы булып эшләгән. Фронтка икмәк ебәрер өсөн ул ауылдаш колхозсылар менән көнөн дә, төнөн дә, тигәндәй, игендән кайтып кермәгән. Бер-бер артлы һуғыш яландарына ағаһы Рәхмәтулла, энекәстәре Заһиҙулла һәм Мифтәх китәләр. 1942 йылдың февраль айында атайым да үҙе теләп һуғышка китә. Минә бары тик туғыҙ ай, апайыма ике йәш булып кала.

"Берҙән-бер генә хаты килде, – тип әйтә торғайны әсәйем. – Тилмереп хат көтә инек. Ауылда берәй ғаиләгә хат килһә, йыйылып китер инек, алыстағы хәбәрҙәрҙе белеп кала инек. Минекен дә күрмәгәнме икән, тигән өмөт йәшәй ине йөрәктәрҙә".

Ләкин икенсе хатты атайым үҙе түгел, уның хеҙмәттәштәре, командирҙары яҙған: "20 сентябрҙә 1943 йылда Орловск өлкәһенең Ульяновск районында Брусино тигән ауылдың янында батырҙарса һәләк булды..." Шундай хәбәрҙе Заһиҙулла ағайымдың да ғаиләһе алған. Рәхмәтулла буайым менән Мифтәх ағайым яраланһалар ҙа иҫән кайтып киләләр һуғыштан һуң.

Илебеҙҙә тыныслык булдырылғас ни, беҙ бирешмәнек, әсәйем беҙҙе үҫтерҙе, кеше итте, рәхмәт уға. Ләкин ғүмер буйы атайымды һағынып, күрәһе килеп йәшәнем. Күңелемдә шул һағыштан шиғыр юлдары ла тыуа кайһы сакта.

*Көтмәгәндә гәзиз Ватаныбыҙға
Һөжүм итте йыртҡыс фашистар,
Калды катын-кыҙҙар,
балалар, карттар...
Яу кырынан берҙән-бер
хат килде,
Кош телендәй сәләмгә
шат инек,
Ә икенсе хатты инде
үҙе яҙмаған:
"Һәләк булды яуҙа батыр..." тип.
Ышанманык,
атайҙы беҙ көттөк,
Ишетергә теләп
"Балам!" тигәнен,
Косағына кереп тыңлар инек
Яғымлы һәм йылы тауышын.
Бала булып ултырманык
атай тубығында,
Һиҙмәнек беҙ атай һөйөүен,
Тоймаһак та атай йылыһын,
Әсәй беҙҙе етем итмәне.
Бирешмәйсә ауырлыктарға,
Сабыр ғына беҙҙе үҫтерҙе.
Замандаштар,
минең теләгем шул:
Һуғыш, яуҙар бер ҙә булмаһын,
Ерҙә бөтә-бөтә балалар ҙа
Ата йылыһын тойоп йәшәһен!*

**Кәтибә ТӘЖИТДИНОВА,**
**79 йәш.**

Башкорт теле йылы

# Илһөйәрҙәр ярышты

***Сосновка районының Сиреүсе урта мәктәбендә башкорт теле һәм әҙәбиәте буйынса өлкә олимпиадаһы булып уҙҙы.***

Мәктәп укыусыларының өлкә олимпиадаһы 25-се тапкыр уҙҙы. Сосновка районының Сиреүсе мәктәбе һайланыуы осраклы түгел. Беренсенән, олимпиаданың географияһын йәйелдереү максаты куйылһа, икенсенән, арҙаклы шәхесебеҙ – шағирә Кәтибә Кинйәбулатова тыуыуына 100 йыл тулыу менән бәйле булды.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, студентка Кәтибә институттың ситтән тороп укыу бүлегенә күсеп тыуған яктарына кайткан. Буласак шағирә үҙенең тәүге педагогик хеҙмәт юлын Сиреүсе ете йыллык мәктәбендә башлаған.

Ярышка килеүсе кунактарҙы ихлас каршылау, мәктәп буйлап экскурсия, тантаналы линейка, йыр-моңло ял минуттары һәм махсус рәүештә укытыусылар өсөн оҫталык дәрестәре – былар барыһы тәжрибә уртаклашыу байрамы булып күңелдәргә күсте.

Олимпиаданы тантаналы асканда: "Кәтибә апайҙың рухы ярҙам итһен!" – тип сакырыу-телмәренә мәктәп директоры Әлфиә Салауат кыҙы Котлохужина һүҙҙәренә оло мәғәнә һалынғайны.

Сиреүсе – Силәбе өлкәһендә 100 йыллык тарихы булған өлкән һәм абруй казанған мәктәп. Бында туған тел бәйгеһе беренсе тапкыр ойошторолдо. Ысын милли рухта, арҙаклы шәхесте ихтирам итеү һәм һөнәр эйәләре аралашыуының матур байрам төҫөндә уҙҙы. Майҙан хужалары – педагогик коллектив, әйтерһең дә, шундай оҙак үҙ милләттәштәрен һағынып көткән, бер быуатлык тәжрибәләрен колас йәйеп уртаклашты.

Ә бына башкорт теле кабинеты – "Кәтибә Кинйәбулатова исемендә мемориал кабинет!". Стенала – заманса сағыу плакаттар: Кәтибә Кинйәбулатова шиғырҙары, фотографиялар, ғилми цитаталар, әҫтәлмә материалдар һ.б. "Кабинетты туплау әле дауам итә, шағирәнең шәхси тормошона бәйле әйберҙәр йыйбыҙ", – тип таныштырҙы үҙ эше менән башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы Лариса Саедғәлина.

Сиреүселәр туған тел укытыу эштәре көйлө. "Акмулла укыуҙары", "Мостай укыуҙары" еңеүселәрен, "Әкиәт һөйләүселәр конкурсы"нда гран-при яулаусыларҙы ошо мәктәп әҙерләгән. Сиреүселәр бер сиреү булып тупланып милли мәғариф сафында ышаныслы баралар, рәхмәттәр яуһын, уңыштар юлдаш булһын тип теләйбеҙ.

**Ҡамса МОРТАЗИН, олимпиаданың жюри ағзаһы.**

Бәйгеләр

# Әсәм телендә һөйләшәм!

***Көҙәш балалар баксаһында "Әсәм теле – сәсән теле" тигән дүртенсе тапкыр район шиғыр һөйләүселәрҙең конкурсы уҙҙы.***

Арғаяш районында шиғыр һөйләүселәр бәйгеһе йылдан-йыл йәнләнә һәм матур төҫ ала бара. Унда урта мәктәп укыусылары, башланғыс кластар һәм балалар баксалары әүҙем катнаша. Был әһәмиәтле сараны ойоштороусы – мәғариф бүлеге.

Быйыл конкурстың еңеүсеһе – Элиза Әлибаева, Илина Баһаутдинова менән Милена Ғиниәтуллина призерҙар булды.

**Римма ҺИБАТУЛЛИНА.**

Хеҙмәттәшлек

# Сәнғәт серҙәренә өйрәнәбеҙ



***Арғаяш менән Башкортостандың сәнғәт оҫталары араһында ижади хеҙмәттәшлек дауам итә.***

Был юлы баш каланан танылған сәнғәт оҫталары – балетмейстер Азамат Кәримов менән курайсы Азат Айтколов килгәйне. Арғаяш сәнғәт мәктәбендә улар дәрес бирҙеләр, Колой һәм Бәжекәй урта мәктәптәрендә оҫталык дәрестәре уҙғарҙылар.

"Халык хореографияһы буйынса методик ярҙам күрһәтеү һәм консультация биреү максаты менән килдек. Беҙҙе күптән көткәндәр, бында башкараһы эштәр күп. Арғаяштарға ярҙам кулы һуҙыуыбыҙға шатбыҙ", – тине Азамат Кәримов.

Ижади хеҙмәттәшлек файҙаға. Ғилем-һөнәр өләшкәндә генә арта, тиҙәр. Бындай бәйләнештәр, һис шикһеҙ, йәш йондоҙҙарҙы кабыҙыуға ярҙам итәсәк.

**Римма ҺИБАТУЛЛИНА.**

Махсус битте Ҡамса Мортазин әҙерләне.